**Муниципальное общеобразовательное бюджетное учреждение**
**средняя общеобразовательная школа с.Нугуш**
**муниципального района Мелеузовский район**
**Республики Башкортостан**

| РАССМОТРЕНО | СОГЛАСОВАНО | УТВЕРЖДАЮ |
|---|---|---|
| на заседании ШМО | | |
| Протокол № 1 | Зам.директора по УР | Директор МОБУ СОШ с.Нугуш |
| ____Кинзябулатова Г.В. | ________ Занкина Н.В. | ________ Габбасова Г. Ш. |
| «27» августа 2020г. | | Приказ № 83 от 28.08.20 |
| | «28» августа 2020г. | «28» августа 2020г. |

# Рабочая программа

## Рабочая программа
## по родной (башкирской) литературе
## для 5 -9 классов

Уровень образования: основное общее образование
Срок реализации: 2020 – 2025 г.г.

**Составители:**
учителя башкирского языка и литературы
Габбасова Р.М.
Ямансарина М.Д.

**2020**

## 1. Уҡыу предметын үҙләштереүҙең планлаштырылған һөҙөмтәләре

**Шәхсән һөҙөмтәләр:**

- башҡорт теленең, башҡорт милләтенең, башҡорт халҡының иң төп милли-мәҙәни ҡиммәте икәнен аңлау;
- туған телгә ихтирамлы булыу, уның бер телдән дә кәм булмауын аңлау, уны милли мәҙәниәт күренеше телмәр мәҙәниәтен камиллаштырырға ынтылыу булараҡ һаҡлау;
- башҡорт телендә әҙәби әҫәрҙәрҙе уҡыуға ихтыяж булдырыу.

**Метапредмет һөҙөмтәләре:**

- телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрен дә үҙләштереү;
- ишеткән һәм уҡыған мәғлүмәттәрҙең мәғәнәһен дөрөҫ аңлау;
- төрлө стилдәге һәм жанрҙағы текстарҙы тыңлап, дөрөҫ аңлау;
- төрлө сығанаҡтарҙан (әҙәбиәт, СМИ, интернет) кәрәкле мәғлүмәтте эҙләп таба алыу, һүҙлектәр, белешмә материалдар менән эшләй белеү;
- уҡылған йәки тыңланған тексты төрлө кимәлдә (тулы, ҡыҫҡартып, план формаһында) һөйләй белеү;
- аудитория алдында сығыш яһай алыу;
- башҡорт теленән һәм әҙәбиәтенән алған белемдәрҙе рус теле һәм әҙәбиәте (предмет-ара кимәл) буйынса белемдәр менән сағыштыра, анализлай белеү.

**Предмет һөҙөмтәләре:**

- туған әҙәбиәттең башҡорт халҡы тормошондағы урыны, уның башҡа халыҡтар әҙәбиәттәре менән уртаҡлығы һәм үҙенсәлеге тураһында белем алыу;
- телмәр этикеты нормаларын белеү;
- телмәр практикаһында лексик, грамматик синонимияның мөмкинлектәрен аңлау, уларҙы дөрөҫ ҡуллана белеү;
- әҙәби текстарҙы анализлағанда, туған телдең эстетик функцияһын баһалай белеү.

## II.Уҡыу предметының йөкмәткеһе

## 5 – се класс

Көҙ – 9 сәғәт.

С. Муллабаев. Шатлыҡлы иртә. Б. Бикбай. Туған тел.

Шиғырҙарҙа туған телде данлау, хөрмәтләү мотивтарының сағылышы. Тасуири уҡыу күнекмәләре. Туған телдең ҡәҙере, уны белеүҙең мөһимлеге тураһында әңгәмә.

Әминбәк (башҡорт халыҡ әкиәте). Әкиәттең йөкмәткеһен үҙләштереү, әкиәт стилендә һөйләү күнекмәләре үткәреү. Һүҙлек өҫтөндә эш.

Н. Иҙелбай. Дүрт миҙгел. Б.Ноғоманов. Йәйбикә менән Көҙбикә. А.Йәғәфәрова. Яҡшылыҡ. Әҫәрҙәрҙә көҙгө тәбиғәттең тасуирланыуын ҡарау, уны үҙең күргәндәр менән сағыштырыу. Шиғырҙарҙы тасуири уҡыу, һүрәттәр төшөрөү.

Тыуған ер (ҡобайыр). Т. Ғәниева. Уралиә тигән ил (әкиәт).

ӘВахитов. Аҡһаҡал аманаты. «Минең тыуған төйәгем» темаһына әңгәмә. Тасуири уҡыу күнекмәләре. Тыуған ер, тыуған төйәк, Башҡортостан, Урал тураһындағы башҡа әҫәрҙәрҙе иҫкә төшөрөү.

Ф. Исәнғолов. Хәмит күпере. А.Йәғәфәрова. Дуҫлыҡ менән шаярмайҙар. Ғ. Хисамов. Аҡъяурын сал бөркөт. Хикәйәләрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, уларҙа дуҫлыҡ, хеҙмәт темаһының сағылышын ҡарау. Образдарға характеристика биреү. Яңы һүҙҙәр үҙләштереү.

Ҡыш – 14 сәғәт

В. Әхмәҙиев. Ҡышҡы урманда. Н.Мусин. Ҡоралайҙар. М.Кәрим. Ҡыш бабай бәләкәй саҡта. Шиғырҙа, хикәйәләрҙә ҡышҡы тәбиғәттең матурлығы, шыршы байрамының тасуирланыуы. Тасуири уҡыу күнекмәләре үткәреү. Шиғри телмәр һәм проза телмәре. Хикәйәләү тураһында төшөнсә.

«Ҡамыр батыр» әкиәте, "Ҡәмән менән Сәмән, картуф сөскән Сәлмән" әкиәте. Мәҡәлдәр. Йомаҡтар. Таҡмаҡтар. Йырҙар. Башҡорт халыҡ ауыҙ-тел ижады тураһында дөйөм белешмә биреү, уның традицион жанрҙарын барлау, һәр жанрға хас үҙенсәлектәрҙе асыҡлау. Әкиәттәрҙең тематик төркөмдәрен ҡарау. Әкиәттәрҙең

йөкмәткеһен үҙләштереү, әкиәт стилендә һөйләү күнекмәләре үткәреү. Әкиәт геройҙарына характеристика биреү.

Д. Бүләков. Яралы китап. Ә.Вәхитов. Өс бөртөк бойҙай. Хикәйә тураһында төшөнсә. М.Кәрим. Дан көпөс түгел. Ә.Әминев. Әсикмәк. Хикәйәләрҙә тыныс тормоштоң ҡәҙерен белеү, ветерандарҙы хөрмәтләү кеүек төшөнсәләрҙе аңлатыу.

Ф. Мөхәмәтйәнов. Әсәйем ҡулы. Әсә йөрәге (ҡобайыр). Ғ.Аллаяров. Таҫтамал.

Әҫәрҙәрҙә әсә образының бирелешен асыҡлау. Шиғырҙарҙы тасуири итеп уҡыу күнекмәләре үткәреү. Хикәйәләрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, һөйләргә өйрәнеү.

Башҡорт халыҡ йырҙары. Оҙон көй. Ҡыҫҡа көй. Йырҙарҙа халыҡ тарихында булып үткән тарихи ваҡиғалар, халыҡтың тормош-көнкүреше, йолалары сағылыуын төшөндөрөү.

Яҙ – 7 сәғәт

Р. Назаров. Яҙ килә. С. Әлибаев. Яҙҙы кем килтергән? Б. Ноғоманов. М.Кәрим. Һеңлемдең төшө. Р. Ғарипов. Һабантурғай. Йәнләндереү тураһында төшөнсә. Н. Мусин. Атайымдың ос һәнәге. Әҫәрҙәр өҫтөндә тасуири уҡыу күнекмәләре үткәреү. Шиғырҙарҙа миҙгелдәр алмашыныуы, тәбиғәттең уяныуы, яҙ килеүе, ҡоштарҙың, хайуандарҙың тормошондағы үҙгәрештәрҙе күҙәтеү. Яҙ тураһында әңгәмә үткәреү, ижади эштәр башҡарыу. Йәнләндереү тураһында төшөнсә.

Р. Ниғмәти. Еңеүселәргә дан! В. Исхаков. Миҙал һәм малай.А. Игебаев. Еңеү көнө.

Еңеү көнөнә арналған шиғырҙарҙы тасуири уҡыу. Шағирҙарҙың был иҫтәлекле тарихи ваҡиғаға, еңеүселәргә мөнәсәбәтен, ватансылыҡ тойғоларының сағылышын күҙәтеү, Еңеү көнө, Бөйөк ватан һуғышы, халҡыбыҙҙың ил азатлығы өсөн һуғышта күрһәткән батырлығы тураһында әңгәмәләр ойоштороу, ижади эштәр башҡарыу.

З. Хисмәтуллин. Урман ҡунағы. С. Агиш. Турыҡай. Тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

М.Ғафури. Һарыҡты кем ашаған? Мәҫәлдәрҙең мәғәнәһенә төшөнөү, йөкмәткеһен үҙ һүҙҙәреү менән һөйләп өйрәнеү. Әҫәрҙе ролдәргә бүлеп уҡыу, образдарға характеристика биреү. Аллегория һәм мәҫәл тураһында төшөнсә.

Йәй – 2 сәғәт.

С. Муллабаев. Йомарт йәй. Б. Рафиҡов. Йондоҙ һанаусы малай. Р. Солтангәрәев. Эшләп ашаһаң... Әҫәрҙәрҙә йәйге тәбиғәттең тасуирланыуы. Үҫемлектәрҙең, бөжәктәрҙең тормошон күҙәтеү. Йәй, йәйге каникул, йәйге эштәр тураһында әңгәмәләшеү, ижади эштәр башҡарыу. Тасуири уҡыу күнекмәләре. Йәйге тәбиғәткә экскурсия ойоштороу.

## 6-сы класс

Уҡыу – белем шишмәһе - 1 сәғәт. У. Кинйәбулатов. Уҡытыусыма.

Йырым минең- Башҡортостан –2 сәғәт. Ф.Туғыҙбаева. Эй яҙмышым минең – Башҡортостан. Ғ.Хөсәйенов "Мөҡәддәс" Башҡорт әҙәби теле, уның нормалары тураһында төшөнсә биреү.

Уҙған ғүмер– ҡалған хәтер – 2 сәғәт. Ә Усманов " Башҡорттарҙың ғәскәри хеҙмәте"(өҙөк). Ғ. Хөсәйенов. "Рудасы Исмәғил Тасим улы"(повестан өҙөктәр).

Ил һаҡлап, азатлыҡ даулап – 3 сәғәт. Башҡорт ихтилалдары (белешмә). Башҡорт халыҡ йыры «Салауат». Степан Злобин. "Салауат Юлаев" (романдан өҙөк).

Төньяҡ амурҙары – 2 сәғәт. Я. Хамматов."Төньяҡ Амурҙары". Рус–француз һуғышы бәйете. Бәйет тураһында төшөнсә.

Утлы йылдар ауазы - 2 сәғәт. Ш.Бабич. Башҡорт халҡына көйлө хитап. Р.Солтангәрәев. Осто бөркөт. Хитап тураһында төшөнсә.

Уралып ятҡан Уралтау – 2 сәғәт. Урал (башҡорт халыҡ йыры) Р.Бикбаев. Уралыма.

Я.Хамматов. Самородок. (романдан өҙөк).

Ағиҙелкәй алҡын, һыуы һалҡын – 3 сәғәт. Башҡортостан йылғалары тураһында белешмә. Р. Бикбаев." Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!", Ағиҙел менән Яйыҡ.(риүәйәт), ӘВахитов. Ир ҡанаты. Характеристика тураһында төшөнсә.

Тау башында балҡый бер ҡала – 1 сәғәт. Өфө. А.Камалов. Боронғо башҡорт ҡалалары.

Башҡорт йолалары – 2 сәғәт. А.Ҡобағошов. Ҡарға бутҡаһы тәмлеме? Т.Ҡарамышева. Кәкүк сәйе.Башҡорт йолалары тураһында белешмә. Башҡорттарҙың борондан килгән байрамдары. С.Агиш. Ҡунаҡ һәм намыҫ.

Башҡорт аштары – 1 сәғәт. Башҡорт халҡының милли аштары тураһында белешмә. Милли аштар. Башҡорт ҡорото. Башҡорт балы.

Әсәм теле- сәсән теле – 2 сәғәт. Башҡорт теле(белешмә). З.Биишева. Башҡорт теле. Башҡорт халыҡ әкиәте «Яҡшы һүҙ-йән аҙығы». Р.Ғарипов. Туған тел.

Башҡорттар китте һуғышҡа – 1 сәғәт. Я. Хамматов.'' Башҡорттар китте һуғышҡа...''

Башҡорт халыҡ ауыҙ-тел ижады - 1 сәғәт. Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады (белешмә). Алдар менән Шайтан. (Башҡорт халыҡ әкиәттәре).

Боронғо әҙәби ҡомартҡыларыбыҙ – 2 сәғәт. Башҡорт әҙәбиәте тарихынан (белешмә). Ҡол Ғәли ''Йософ'' ҡиссаһы. С.Юлаев. Бүгәсәүгә ҡушылып, Ир-батырға ҡуш булып.

Башҡортостандың халыҡ шағирҙары, яҙыусылары – 2 сәғәт. Халыҡ шағирҙарының тормош юлы менән танышыу, ижадтарына ҡыҫҡаса күҙәтеү яһау, уларҙың башҡорт әҙәбиәте тарихында урыны тураһында фекер алышыу. Биография һәм автобиография тураһында төшөнсә биреү. Р.Ғарипов. Аманат. Р.Бикбаев. Халҡыма хат. З.Биишева ижады. Дауыл.(повестан өҙөк)

Дуҫлыҡ менән көслөбөҙ – 2 сәғәт. М.Кәрим. Оҙатыу. (''Беҙҙең өйҙөң йәме'' повесынан өҙөк) Әҙәбиәт теорияһы буйынса йыл буйына үтелгәндәрҙе ҡабатлау, дөйөмләштереү.

## 7- се класс

Боронғонан аманат. Башҡорт халыҡ ижады – 4 сәғәт. Халыҡ ижады тураһында. Әкиәттәр. Тематик яҡтан әкиәттәрҙең төркөмдәре: тормош-көнкүреш, тылсымлы, батырҙар һәм хайуандар тураһындағы әкиәттәр.

Хайуандар тураһындағы әкиәт – «Етем төлкө».Тылсымлы әкиәттәр. «Алтын алма», «Әбйәлил». Тормош-көнкүреш әкиәте «Алтын тамсы».

Әҙәбиәт теорияһы. Эпитет, гипербола, аллегория төшөнсәләрен ҡабатлау.

Риүәйәт һәм легендалар. Тарихи хикәйәләр– 2 сәғәт.

Риүәйәт һәм легендаларға төшөнсә биреү. Уларҙың тематик бүленеше, оҡшаш һәм айырма яҡтары.

Йырҙар. Йыр тураһында төшөнсә. Таҡмаҡтар.-5 сәғәт. Боронғо һәм хәҙерге йырҙар. Оҙон һәм ҡыҫҡа йырҙар. Йырҙарҙа көй һәм моңдоң әһәмиәте. Тематикаһы һәм йөкмәткеһе яғынан йырҙарҙың төркөмдәргә бүленеше. Халыҡтың рухи тормошонда йырҙың роле. Тарихи һәм лирик йырҙар. Бейеү таҡмаҡтары. Уйын таҡмаҡтары.

Алтын көҙ – 1 сәғәт. М. Тажи. Һәм Ф . Рәхимғолова шиғриәте.

Уҡыу – белем шишмәһе – 2 сәғәт. Н.Мусин. «Тайғаҡ баҫма». Р.Байбулатов . «Күңел күҙҙәре”. Әҫәрҙәрҙә дуҫлыҡ, тырышлыҡ, тоғролоҡ, намыҫлылыҡ һәм әхлаҡ проблемаларының сағылышы.

Дуҫлыҡта – берҙәмлек – 2 сәғәт. Р.Сафин. Һабаҡташтарыма. М.Кәрим. Миләш. Р.Байбулатов “Һарыбай”.Был әҫәрҙәрҙә дуҫлыҡты данлау. Ысын дуҫлыҡты баһалау.

Хеҙмәте барҙың – хөрмәте бар - 2 сәғәт. М.Ғафури. «Гөлдәр баҡсаһында» шиғырында эшсәнлек, дуҫлыҡ һәм дошманлыҡтың ҡапма-ҡаршы һүрәтләнеүе. Ж.Кейекбаев. «Оморҙаҡ бабай». Хикәйәнең идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү. Әҙәбиәт теорияһы: Герой тураһында төшөнсә.

Башҡортостан-ғәзиз ерем – 1 сәғәт.

ӘҮтәбай. «Башҡортостан» шиғырында лирик геройҙың кисерештәрендә Башҡортостан, Тыуған ил образы. М. Кәрим. «Ҡайын япрағы тураһында». Шиғырҙа ҡайын һәм япраҡ образы. Башҡортостандың данлы тарихының сағылышы.

Ап-аҡ ҡарҙар яуа – 2 сәғәт.

Ш.Бикҡолов. Урман., Ғ Туҡай. Ер йоҡоһо. Шиғырҙарҙа ҡыш миҙгеленең, тәбиғәт күренештәренең һүрәтләнеше. ӘӘхмәтуллин. «Биҙәкле сана». Әҫәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү.

Ил намыҫы - ир күңелендә – 2 сәғәт.

РФ.Аҡбулатова. Атай икмәге. В. Исхаҡов. Кеше күңеле – тәрән даръя. Тыуған илде, тыныслыҡты һаҡлаусы ил улдары образдары.

Ғәзиздәрҙән-ғәзиз әсәләр – 2 сәғәт.

З.Алтынбаева. Әсә һүҙе. Ф.Иҫәнғолов.Бер йомғаҡ май. Әҫәрҙәрҙә әсәйҙәр изгелегенең, бөйөклөгөнөң сағылышы.

Эх, күңелле яҙ килә! – 2 сәғәт.

Р.Ниғмәти. «Яҙ килде, яҙ!» шиғырында яҙ килеү менән тәбиғәттең уяныуының, яҙғы эштәр башланыуының һүрәтләнеше. Р.Ғариповтың «Һабантурғай» шиғырында яҙ килтереүсе һабантурғай образы. һДәүләтшина. Айбикә.

Тел - тере шишмә – 2 сәғәт.

М. Кәрим. Искәндәр Әсғәте. ("Оҙон – оҙаҡ бала саҡ" әҫәренән өҙөк)

Йәмле йәй – 2 сәғәт.

М.Ғафури. «Болон» шиғырында йәйге болон матурлығының тасуирланыуы.

## 8-се класс

Мәктәп– белем шишмәһе! (3 сәғәт)

С.Әлибай "Мәктәп юлы" шиғырында мәктәп юлы менән тормош юлы бәйләнешенең һүрәтләнеше.

Н.Мусин "Һабаҡ". Йөкмәткеһен үҙләштереү. Әҫәрҙә балаларҙың йәйге каникулдағы эштәренең һүрәтләнеше.

Р.Тимершин "Уйлап табыусы". Юмор аша Хәйҙәрҙең кәмселеген фашлау.

Халыҡ ижады – халыҡ хазинаһы (2 сәғәт)

"Ике сәсән", "Сура батыр" ҡобайырҙарының идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү, образдарын асыу.

Көҙ  - хеҙмәт һәм байлыҡ миҙгеле (4 сәғәт)

З.Биишева "Көҙгө ямғыр", Х Назар "Көҙгө көн. Болотло.Һалҡын" шиғырында көҙгө ямғыр һәм моңһоу тәбиғәттең һүрәтләнеше.

Р.Ханнанов "Икмәк ҡәҙере". Әҫәрҙә көҙгө ураҡ, игенсе хеҙмәтенең һүрәтләнеше. Хәким ағай һөйләгән ваҡиғаның әһәмиәте.

Р.Өмөтбаев "Әмир баҫыуы". Һуғыш йылдарында ябай халыҡтың фиҙакәр хеҙмәте. Тыл менән фронттың берҙәмлеге. Бригадир Әмирҙең кешелеклелеге, НКВД кешеләренең ҡанһыҙлығы.

Башҡортостан – алтын бишек! (2сәғәт)

А.Игебаев "Башҡортостан ил генәм" шиғырында Башҡортостан, Тыуған ер образдары. Н.Нәжми "Өфө йүкәләре" йырының тексын үҙләштереү.

Салауат батыр – ир ине (3сәғәт)

"Салауат батыр" ҡобайыры.Ф.Күзбәков. "Яу ораны бит һин, Салауат", шиғырында башҡорт халҡының милли батыры Салауат рухының сағылышы. Илен, халҡын һөйөүсе, ирек өсөн көрәшеүсе Салауат образы.

Я.Хамматов "Салауат" романы (өҙөк). Әҫәрҙә Салауат образында йыр-моңға, тәбиғәткә ғашиҡ, көслө, батыр үҫмерҙең һүрәтләнеше.Тарихи осорға характеристика.

Ҡыш (4 сәғәт)

Ш.Бабич "Ҡышҡы юлда", М.Ғәйфуллина "Ҡыш моңдары" шиғырҙарында ҡышҡы тәбиғәттең һүрәтләнеше. Шиғырҙарҙы тасуири уҡып, ҡышты тасуирлау алымдарын асыҡлау.

Б.Рафиҡов "Бүреләр" әҫәренең йөкмәткеһен үҙләштереү. Бер ғаиләнең тормошо аша һуғыш йылындағы аслыҡ, ауыр тормоштоң һүрәтләнеше. Образдарға характеристика.

И.Теләүембәтов "Маралым таңы". Әҫәрҙә тәбиғәт, кейектәрҙең һүрәтләнеше. Кешеләрҙең тәбиғәткә мөнәсәбәте.

Данлы йылдар, шанлы йылдар (3 сәғәт)

М.Кәрим "Үлмәҫбай" поэмаһы.Поэманың идея-тематик йөкмәткеһе. Н.Ғәлимов "Яуҙан ҡайтҡан ҡурай" әҫәренең идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү.

Р.Өмөтбаев "Генерал Күсимов" әҫәренең йөкмәткеһен үҙләштереү.Бөйөк Ватан һуғышында башҡорт атлыларының ҡаһарманлығын асыу.

Әсәйем – күңел ҡояшым! (2 сәғәт)

Ш.Бикҡол "Әсәйемдең кәңәштәре" шиғырының төп идеяһын билдәләү.

Т.Ғиниәтуллин "Әсә һәм бала" әҫәрендә әсә һәм бала образдары, уларҙың үҙ-ара мөнәсәбәттәренең сағылышы.

Әҙәп барҙа – иман бар (2 сәғәт)

М.Ямалетдинов "Иман" хикәйәһенең идея-тематикаһын асыҡлау.

З.Ғәлимов "Ялан сәскәләре" әҫәрендә атай һәм ул мөнәсәбәте. Атай үрнәге, уның менән ғорурланыу, матур ғаилә мөнәсәбәттәрен күрһәтеү.

Шаулап, гөрләп яҙ килә (3 сәғәт)

Р.Ғарипов "Яҙғы йыр" шиғырында тәбиғәттең йәнләнеүенең һүрәтләнеше.

З.Ураҡсин "Алмағас", "Сәскә ғүмере" хикәйәләрендә кешенең мөнәсәбәте. нигеҙендә балаларҙа матурлыҡ тойғоһо тәрбиәләү.

Р.Сафин "Тол ҡатындар һәм аяҡһыҙҙар бейеүе" шиғырында һуғыштан һуңғы ауыр осорҙоң һүрәтләнеүе. Ҡатын-ҡыҙҙар һәм яралы һалдаттар образы.

Ай, Уралым, Уралым! (3 сәғәт)

ҠАралбай "Ер тураһында ете һүҙ" шиғырында ерҙе һаҡлау, ер өсөн көрәш проблемалары.

Ж.Кейекбаев "Урал тураһында ҡобайыр". Уралдың сал тарихының һүрәтләнеше, ер, азатлыҡ, көрәш темаларының сағылышы.

Н.Мусин "Һуңғы солоҡ" романы . Әҫәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү. Төп идеяһын, проблемаһын асыҡлау.

Йәй (2 сәғәт)

Ф.Рәхимғолова "Бал ҡорто һәм күбәләк". Шиғырҙы тасуири уҡыу, төп идеяһын асыу. Башҡорт балы тураһында әңгәмә ойоштороу. ӘХәмәтдинова "Йәшел аптека" әҫәрендә дарыу үләндәренең әһәмиәтен асыҡлау.

Ҡабатлау. Йомғаҡлау (1 сәғәт)

**9-сы класс**

Тере шишмәләр – 1 сәғәт. Р. Ғарипов. Тел.Б. Бикбай. Тере шишмәләр.

Кендегемде киҫкән ер – 2 сәғәт. Р. Мифтахов. Күрҙем һине. З.В.Туған. Тыуған төйәгемдә. Д. Бүләков. Барбос. Әҙәби төрҙәр тураһында төшөнсә.

Төйәк булған тыуған ер... - 2 сәғәт. Экология. Ф.Ғазин. Ҡырау тейһен әйҙә...М.Кәрим. Айыу мажараһы. ҠАралбай. Янғантау.

Данлы тарих – 2 сәғәт. Ш.Бабич. Халҡым өсөн. Б.Рафиҡов. Һөйәнтуҙ фажиғәһе. Роман тураһында төшөнсә.

Рухи тамырҙарыбыҙ – 6 сәғәт. "Урал батыр" эпосының идея – тематик йөкмәткеһе.

"Урал батыр" эпосында образдар системаһы.Ҡол Ғәли. Йософ ҡиссаһы.

Байыҡ сәсәндең Салауат батырға әйткәне. С. Юлаев. Яу.М.Аҡмулла. Инсафлыҡ.

Ир – егеткәй менән ат башы – 3 сәғәт

Т.Ғиниәтуллин. Буян.Р.Өмөтбаев. Ғилмишәриф. Ғ. Вәлиуллин. Ҡалға хужаһы һәм тотҡон. Повесть тураһында төшөнсә.

Байрам, байрам... – 1сәғәт З. Әминев. Башҡорт һабантуйы.

Уралымда үҫкән, ай, ҡурайым... – 2 сәғәт

М.Ямалетдинов. Мираҫ. Ш. Бабич. Ҡурайҡайға. Р.Солтангәрәев. Ишмулла ҡурайсы.

Ватанға хеҙмәт – изге бурыс – 4 сәғәт . Р. Мифтахов. Ҡалҡан. Р.Назаров. Һалдат.

М.Ямалетдинов. Һалдат итеге. Н.Асанбаев. Ҡыҙыл Паша. Идея – тематикаһы. Образдар системаһы. И.Кинйәбулатов. Бородино.

Айға ла ғына, көнгә тиңләмәйем... – 2 сәғә.

Риф Мифтахов. Әсә. Р.Кинйәбаев. Мин ҡайтырмын, әсәй!

Мәңгелек ут – 3 сәғәт. ӘМоратов. Тере хәтер. М.Йәлил. Ышанма. Ж.Кейекбаев. Зөбәй Үтәғолов.М.Кәрим. Малайҙар. Әҙәби процесс тураһында төшөнсә.

Берҙәмлек – мәңге һаҡлар хазина – 3 сәғәт

Башҡортостан халыҡтары. Х.Ғиләжев ижады.С.Шәрипов. Һалсылар. Н.Сәлимов. Аҡ юл, һиңә!

## III.Тематик планлаштырыу

| 5 – се класс | |
|---|---|
| Көҙ. | 9 |
| Ҡыш. | 14 |
| Яҙ. | 7 |
| Йәй. | 2 |
| 6 – сы класс | |
| Уҡыу – белем шишмәһе. | 1 |
| Йырым минең- Башҡортостан . | 2 |
| Уҙған ғүмер– ҡалған хәтер. | 2 |
| Ил һаҡлап, азатлыҡ даулап. | 3 |
| Төньяҡ амурҙары. | 2 |
| Утлы йылдар ауазы. | 2 |
| Уралып ятҡан Уралтау. | 2 |
| Ағиҙелкәй алҡын, һыуы һалҡын . | 3 |
| Тау башында балҡый бер ҡала . | 1 |
| Башҡорт йолалары . | 2 |
| Башҡорт аштары. | 1 |

| | |
|---|---|
| Әсәм теле- сәсән теле. | 2 |
| Башҡорттар китте һуғышҡа. | 1 |
| Башҡорт халыҡ ауыҙ-тел ижады. | 1 |
| Боронғо әҙәби ҡомартҡыларыбыҙ. | 2 |
| Башҡортостандың халыҡ шағирҙары, яҙыусылары. | 2 |
| Дуҫлыҡ менән көслөбөҙ. | 2 |
| 7- се класс | |
| Башҡорт халыҡ ижады. | 4 |
| Риүәйәт һәм легендалар. Тарихи хикәйәләр. | 2 |
| Йырҙар. Йыр тураһында төшөнсә. Таҡмаҡтар. | 5 |
| Алтын көҙ. | 1 |
| Уҡыу – белем шишмәһе. | 2 |
| Дуҫлыҡта – берҙәмлек . | 2 |
| Хеҙмәте барҙың – хөрмәте бар. | 2 |
| Башҡортостан-ғәзиз ерем. | 1 |
| Ап-аҡ ҡарҙар яуа. | 2 |
| Ил намыҫы - ир күңелендә. | 2 |
| Ғәзиздәрҙән-ғәзиз әсәләр. | 2 |
| Эх, күңелле яҙ килә! | 2 |
| Тел - тере шишмә . | 2 |
| Йәмле йәй. | 2 |
| 8 -се класс | |
| Мәктәп- белем шишмәһе! | 3 |
| Халыҡ ижады – халыҡ хазинаһы. | 2 |
| Көҙ - хеҙмәт һәм байлыҡ миҙгеле. | 4 |
| Башҡортостан – алтын бишек! | 2 |

| | |
|---|---|
| Салауат батыр – ир ине. | 3 |
| Ҡыш. | 4 |
| Данлы йылдар, шанлы йылдар. | 3 |
| Әсәйем – күңел ҡояшым! | 2 |
| Әҙәп барҙа – иман бар. | 2 |
| Шаулап, гөрләп яҙ килә. | 3 |
| Ай, Уралым, Уралым! | 3 |
| Йәй . | 2 |
| 9 –сы класс | |
| Тере шишмәләр. | 1 |
| Кендегемде киҫкән ер. | 2 |
| Төйәк булған тыуған ер... | 2 |
| Данлы тарих . | 2 |
| Рухи тамырҙарыбыҙ . | 6 |
| Ир – егеткәй менән ат башы<br>Байрам, байрам... | 3 |
| Уралымда үҫкән, ай, ҡурайым... | 2 |
| Ватанға хеҙмәт – изге бурыс. | 4 |
| Айға ла ғына, көнгә тиңләмәйем... | 2 |
| Мәңгелек ут. | 3 |

| | |
|---|---|
| Берҙәмлек – мәңге һаҡлар хазина. | 3 |

Прошито, пронумеровано
и скреплено печатью
10 листов
Директор
МОБУ СОШ с. Нугуш
Габбасова Г.Ш.